*Гөлгизәр ФӘЙЗИ*

# ИХЛАСЛЫК



*Флүрә Нигмәтуллина*

Әсе елдән һығылған ағастар түбәләре күккә олғашҡан тауға ҡарай әйелә. Әйтерһең, улар ошо тауҙан яҡлау эҙләй, унының мөһабәтлегенә һыйынып, үҙ асылын ҡурсаларға тырыша. Альберт Мостафиндың картинаһы Башҡортостандың халыҡ артисткаһы, Салауат башҡорт дәүләт драма театры йондоҙо Флүрә Нигмәтуллинаның яҙмышына ишара яһағандай. Тормош ауырлыҡтары һеңгәҙәтә килтереп һуҡҡанда ла, йәнен хыянат атлы йәшен мең ярсыҡтарға телгеләгәндә лә ул яҡлау, ҡурсалау эҙләп сәнғәткә, театрына һыйынды, йөрәк әрнеүҙәрен, күңел ярһыуҙарын сәхнәлә басты. Юҡҡамы ни бөгөн ул: «Мине хатта геройҙарым тәрбиәләне, — ти. — Һәр ҡылығымды уларҙың мөнәсәбәтенә ҡарап үлсәгән мәлдәрем күп булды. Героиняларым миңә көс өҫтәне, артабан башымды юғары күтәреп атларға мөмкинлек бирҙе...»

Актрисаның 60 йәшлек юбилейын ул тыуып үҫкән Благовар районында билдәләгән көндәрҙә Флүрә ханым яҡташтарын ҡасандыр әсәһе Бибинур инәй көйләгән «Тол ҡатындар йыры» менән илатты.

Аҡлы ситса күлдәк алдым,
Байрамда кейермен, тип.
Йәшләй күңелдәрем һалдым,
Ғүмергә һөйөрмөн, тип.

Аҡлы күлдәк, аҡ яулыҡтар
Ниңә ҡарая икән?
Айырылғас та онотолмай,
Ниңә һарғаям икән?

Атаһы Миниярҙы яу яланынан көтөп ала алмаған әсәһенең йән әрнеүҙәренә үҙ мөхәббәтен юғалтыу һағышы ла килеп ҡушылғайны был тетрәткес моңға. Ғәҙәттә йырсының моңон сылтырап аҡҡан шишмә тауышынамы, гөрләп йүгергән йылға моңонамы, һандуғас сутылдауынамы оҡшаталар. Тәбиғәттә Флүрә ханымдың йыр-моңон сағыштырырҙай бер ни ҙә тапманым. Ул моң нурлы күктәй аяҙ, ҡояш ише яҡты, сикһеҙ ҡырҙар кеүек иркен, мөһабәт тауҙарҙай бейек, тиер инем, сағыштырыу әгәр мөмкин булһа. Моғайын, былдай моңдо сихри тип атайҙарҙыр, сөнки үҙең дә һиҙмәҫтән ошо ғәжәйеп өндәр тотҡонона эләгәһең дә осһоҙ-ҡырыйһыҙ күктәргә олғашаһың, хыял тулҡынында тирбәләһең.

Салауат театрында эшләгән дәүерендә Флүрә Минияр ҡыҙы етмешләп (ә уларҙың егермәгә яҡыны — йырлы) роль башҡарҙы, һәм уларҙың һәр ҡайһыһы тамашасы күңелендә уйылып ҡалды. Йыр аша образды байыта, моң аша героиняһының күңелен тулыраҡ асып бирә актриса. Әйткәндәй, был театрҙа йырсы актрисалар традицияһы

дауам итә. Элегерәк халыҡты Мәрйәм апай Емалетдинова, унан Рәйсә апай Сәйфуллина йыр-моңо менән таң ҡалдырһа, хәҙер иһә Флүрә Ниғмәтуллина һәм Гөлсәсәк Шәриповаларҙың моңо күңелдәрҙе арбай. Ә бит йәш йырсы Гөлсәсәкте лә театрға әйҙәүсе Флүрә ханым булды.

Т. Ғиззәттең «Ҡыйыу ҡыҙҙар»ында (был спектакль һуңынан театрҙың визит карточкаһына әйләнде), В. Розовтың «Туй көнө»ндә һәм «Таң ҡоткәндә» әҫәрҙәрендә, М.Хәйҙәровтың «Кейәү балаҡай»ында (йырлы образ булмаһа ла, Лира ролен башҡарыусы Флүрә ханым бында йыр ҡушты), А.Абдуллиндың «Онотма мине, ҡояш!»ында, Ә.Атнабаевтың «Балаҡайҙарым»ында (пьеса буйынса Әлиә лә йырсы образ түгел), башҡа бик күп драма, комедия, трагедияларҙа актрисаның саф моңо меңәрләгән йөрәктәрҙе тетрәтте, спектаклде гәзәти сәхнә бейеклегенән күпкә юғары күтәрҙе.

Флүрә ханымдың тыуған ауылы Өйҙөрәкбаш — данлы ауыл. Бында Советтар Союзы Геройы Хәмит Әһлиуллин, медицина фәндәре докторы, профессор Мәрфуға Ғайсина, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, генерал Хажиәхмәт Ишбулатов, танылған журналист, әҙип, профессор Ғәлимйән Ниғмәтуллин, башҡалар донъяға килгән. Ауылға Бөрө яҡтарынан күсеп килгән Ишбулатов исемле бай нигеҙ һалған. Һуңынан был нәҫелдән арҙаҡлы кешеләр үҫеп сыҡҡан. Кешене белеү, аңлау өсөн уның тыуған яҡтарына бар, тиҙәр. Үтә лә кеселекле, киң күңелле халыҡ йәшәй Өйҙөрәкбашта. Флүрә ханымды ҡайтҡан һайын ҡолас йәйеп ҡаршылайҙар, күстәнәстәрен тейәп, хәйерле юл теләп оҙатып ҡалалар. Тыуған көнө тантанаһына төрлө сәбәптәр арҡаһында һуңлап ҡайтырға тура килде уға. Клубҡа йыйылған халыҡ яратҡан артисткаһын дүртбиш сәғәт көтөп ултырһа ултырҙы — таралманы.

— Аллаға шөкөр, килеп еттең! — тип ихлас ҡыуанышты улар юбилярҙы күргәс.

Актрисаға арнап йырҙар башҡарылды, шиғырҙар уҡылды, матур теләктәр әйтелде, хатта Флүрә ханымдың коллегаларынан берәү: «Әллә был ауылда барыһы ла шағир инде», — тип ҡуйҙы.

Ә Флүрә Минияр ҡыҙы күңеле менән бала сағына ҡайтты, Өйҙөрәктә һыу ҡойондо, Хажи тауына күтәрелде, әсәһе йырлай-йырлай йорт эштәре бөтөрөп йөрөгәндәге бәхетле мәлдәрҙе кисергәндәй булды. Уйҙарында Хажи баҡсаһын байҡап, күлдә йөҙгән аҡҡоштарға тағы бер ҡат һоҡланды, инде аранан мәңгелеккә күскән яҡташтары менән дә күрешкәндәй булды.

— Бигерәк һәйбәт кешеләр булды әсәйең менән атайың, — тип хәтерләй ауылдаштары. — Атайыңдың йәшләй генә һуғышта ғүмере өҙөлмәһә, бигерәк матур парҙар ине. Ә Бибинурҙың гел самауыры борҡоп, бәлеш-ҡоймағы әҙер булыр ине. Эй-й, оҫталыҡтары... Рәхмәт уларға, һинең кеүек сәскә ҡалдырыуҙарына.

— Гел генә аҡтан кейендә әсәйем. Аҡ яулыҡтың береһен һалып, икенсеһен алып ябынып ҡына торҙо. Саф ине, салт ине...

«Әсәйем менән атайыма тейешле хөрмәтте миңә күрһәтәләр, — тип уйланы Флүрә ханым. — Рәхмәт уларға...»

— Мин һеҙҙе һәр ваҡыт төшөмдә күрәм, — тине үҙе ауылдаштарына. — Һеҙҙең янға күңелемдә лә, хыялымда ҡайтам...

Яҡташтары иһә кескәй генә Флүрәнең, шәм ҡыуығын микрофон итеп тотоп, тәҙрә тупһаһына баҫып, Фәриҙә Ҡудашева булып йырлауын әле лә хәтерләй. Читанан ҡунаҡҡа килеп төшкән Абдулла ағаһы: «Сәрмән»де йырлаһаң, бүләк алып бирәм», — тип ҡыҙыҡтыра. Мәктәптә берәй гәйебе килеп сыҡһа, уҡытыусы Хаят апаһы: «Шайморатов генерал»ды йырлаһаң, яза бирмәйем», — ти. Бәләкәс Флүрә парта өҫтөнә үк менеп китә. Был минутта инде ул үҙен ысын йырсы, ә партаны оло сәхнә итеп тоя. Яза алыуҙан ҡурҡып йырламай ул, ә эсендәге моңон сығарып ҡалыу форсатынан фай-

ҙалана. Ҡыҙыҡай өсөн Фәриҙә Ҡудашеванан да бөйөк йырсы юҡ төҫлө.

Хәйер, үҫеп килгәндә лә, һуңғараҡ та ул актриса булыу хаҡында артыҡ хыялланманы. Бар булмышын яулаған иң оло теләге йыр ине. Ләкин яҙмыш икенсерәк хәл итә. Шулай бер Өфөлә ҡунаҡта саҡта Н. Асанбаевтың «Рәйсә» драмаһын ҡарай һәм Рәғиҙә Янбулатованың уйнауына ғашиҡ була. Спектакль бик оҙаҡ күҙ алдынан китмәй. Актриса булыу хыялы, бәлки, шунда тыуғандыр? Ә бәлки?.. Өфөләге Төҙөүселәр һарайына бейеү түңәрәгенә йөрөгән мәле ине. Драма түңәрәге етәксеһе Фәсәхәт ханым Флүрәне күреп ҡала ла: «Сажиҙә ролендәге ҡыҙ ауырып китте, кил урынына», — ти. Ә спектаклгә дүрт көн ҡалған.

— Юҡ, мин бит мишәр ҡыҙы, башҡортса белмәйем, — ти Флүрә.

— Әле теүәл дүрт көн бар, өйрәтермен! — ти Ф.Аҡсурина.

— Сәхнәлә үҙемде нисек тотҡанмындыр — хәтерләмәйем, — тип көлә хәҙер Флүрә ханым. — Ләкин өс телде бутап һөйләшеүем иҫтә.

Тел, тигәндәй, башҡортса ул иҫ киткес таҙа, оло бер кинәнес менән һөйләшә.

Сәнғәт училищеһына имтихан биргән сағында башҡорт сәхнәһе йондоҙо Зәйтүнә Бикбулатова унан:

— Башҡорт телен яратаһыңмы? тип һорай.

— Яратам.

— Ә ни өсөн?

— Башҡорт теленең тембрын һәм наҙлылығын яратам, — тип яуап бирә буласаҡ актриса.

Һынауға ул бейеү һәм йыр әҙерләп килгән була. Һөнәрҙең икеһенә лә маһир, һынатырлыҡ түгел. Этюд бирәләр. «Әсәйең ауыр хәлдә. Имтихандарҙы ҡалдыр ҙа ҡайтып ет», — тигән «телеграмма» уҡыйҙар. Флүрә үрһәләнеп илай башлай, ҡайҙа барып һуғылырға белмәй. Шунан ғына уға: «Ҡайтып китә күрмә, өйөгөҙҙә барыһы ла һәйбәт», тиҙәр. Ҡупшы кейенгән ҡала сибәрҙәрен уҙып, үҙенең сәнғәт училищеһына инә алырына ҡыҙыҡай һаман ышанып бөтмәй. Бөтә турҙарҙы ла уңышлы үткәс, ауылға ҡайта. Серен иң элек ағаһына сисә. Ә уның шатлығының иге-сиге юҡ! Туғаны уҡырға ингән! Артислыҡҡа! Күрштирәне йыя. Башмаҡ һатып, пальто алып бирергә вәғәҙә итә. Үҙе лә сәнғәткә ғашиҡ, нескә хисле был кеше һүҙендә тора: көҙгөлөккә Флүрә яңы пальтолы була.

1964 йылда училищеның театр бүлеген уңышлы тамамлаған Флүрәне Салауат башҡорт драма театрына эшкә ебәрәләр.

— Бер үҙемде алдылар. Бүтән урын юҡ, тинеләр. Күп йылдар йәштәрҙән яңғыҙыма уйнарға тура килде. Ике яҡшы режиссерға эләктем. Лек Вәлиев менән Вәзих Сәйфуллинға сикһеҙ рәхмәтлемен. Һуңғараҡ Әнүәр Нурмөхәмәтов, Гөлдәр Ильясова менән эшләргә тура килде. Уларға ла рәхмәт.

Кемдер Флүрәне, драматик актриса, тиер ине. Ә кемгәлер характерлы актриса булып күренер. Х.Вәхиттың «Онота алмаһаң, нишләрһең?» әҫәрендә тамашасыны илатҡан, үҙендәге ғорурлыҡ сифаты менән һоҡландырған Тәнзиләне, Ә.Мирзаһитовтың «Ғүмер ике килмәй»ендә — Тәскирәне, Гарсиа Лорканың «Ҡанлы туй»ында — кәләште, Александр Гельмандың «Каза»һында — Наташаны, И.Абдуллиндың «Тиле йәшлек»ендә — Һандуғасты, А.Мағазовтың «Ҡоштар иртә китә»һендә — Маринаны, тағы тиҫтәләгән ролдәрен хәтерләйһең дә хайран ҡалаһың — һәр образ үҙенсә асыла, характерҙы күрһәтеүҙә һис бер оҡшаш, ҡабатланған алымдар юҡ, һәр спектаклдә актриса өр-яңы тормош менән йәшәй. Ҡайҙа һуң бында ысынбарлыҡ менән уйын араһындағы сик? Актрисаның оҫталығы, һәләте һоҡландыра, арбай.

— Мин кәйеф кешеһе, — ти Флүрә ханым. — Бер нәмәне лә йәшерә алмайым. Тормошта ла уйнаған актерҙарҙы яратмайым...

Ысынлап та, ул үтә ихлас кеше. Миңә аҙна тираһе уның менән бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәргә, актрисаның һәр аҙым-хәрәкәтенә, көндәлек

тормошона шаһит булырға тура килде. Төндәр буйы кешелек донъяһы, сәнғәт, тормош һәм мөхәббәт хаҡында фәлсәфә һаттыҡ. Юғары мәҙәниәтле, тәрбиәле был ханымда мин аҙ ғына ла яһалмалылыҡ тойманым. Әлбиттә, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә оло ихтирамымды яулап өлгөргән Флүрә Ниғмәтуллина хаҡында әллә күпме һөйләй алыр инем, мәҫәлән, унған хужабикә, хәстәрлекле әсә, яҡшы кеше булыуы тураһында.

— Минең шатлыҡтарым да, ҡайғыларым да, яңылыштарым да һөнәрем менән бәйле, — тип ҡуйҙы Флүрә ханым моңһоу ғына. — Һәр һулышым театрға бәйләнгән. Барыһы ла... Эйе, мине ҡурсаланылар, ярҙам иттеләр, әсәй-атайымды алыштырған артистар ҙа булды. Йәш актерҙың артабанғы ижад юлы уның иң тәүҙә ниндәй режиссерға килеп эләгеүенә бәйле. Был йәһәттән мин бәхетле. Оло быуын актерҙарының ярҙамын күп күрҙем. Башҡортостандың халыҡ артисы Иршат Вәлиев күп ярҙам итте. Рим Ғәли улы Баянов менән бергә спектаклдәрҙә уйнарға тура килде. Назим Хикмәттең «Онотолған әҙәм»ендә, Мәжит Ғафуриҙың «Ҡара йөҙҙәр»ендә бергә сығыш яһаныҡ. Ауыр холоҡло, ләкин бик әҙәпле ине. Үҙе һәләтле, башҡаларға ла талапсан. Уҡытыусым Ғабдулла Ғиләжевҡа рәхмәтлемен.

Актер һөнәре сикһеҙ физакәрлек талап итә. Әгәр һин шул көндә, шул сәғәттә сәхнәгә сығырға тейеш икәнһең — эстән ниҙәр кисерһәң дә, һыҙланһаң да (тамашасының бында эше юҡ) һин уйнарға тейеш. Бер ваҡыт шулай гастролдә саҡта Флүрә ханымдың аяҡтарына ҡайнар аш түгелә. «Миләш-Миләүшә» спектаклендә ултырып уйнарға тура килә. Әрнеүен баҫырға тырышып ҡысҡыра Флүрә ханым, ә тамашасы уйындан үтә лә ҡәнәғәт. «Ҡара, нисек килештерә», — тип, кинәнеп ҡарайҙар. «Бер ҡасан да булмағанса шәп уйнаның», — тип баһа бирә һуңынан иптәштәре лә.

Һәр авторҙың яратҡан актерҙары була. Флүрә ханыма татар драматургы Хәй Вахиттың әҫәрҙәрендә күп уйнарға тура килә. Драматург үҙе уны «минең героиням» тип атар ине. «Онота алмаһаң, нишләрһең?» драмаһын Флүрә ханым ҡараламала сағында уҡ уҡыған. «Тәнзилә роләндә һине күрергә теләйем», ти автор. Героиня — табип, яҙыусының ҡатыны ла табип. Кәңәшләшеп эшләйҙәр. Флүрә ханымды ҡатыны менән таныштыра. Ләкин премьера көнөн күрә алмай ул. Ә әҫәр донъя күрҙе, һәм актриса Тәнзилә образын бына тигән итеп аса алды.

Флүрә Ниғмәтуллина драматик ролдәрҙә генә түгел, бәлки характерлы ролдәрҙә лә берҙәй оҫта уйнай. Тажи Ғиззәттең «Ташҡындар»ында Зәмзәмбаныу — уның тәүге кире героиняһы. Репетициялар башланғас, үҙе ролгә алынмаһа ла, Флүрә ханым әҙерлек барышын ҡарап ултыра. Зәмзәмбаныуҙы Рева Исхакова уйнай. Шул саҡ режиссер килә лә: «Әйҙә, уйнап ҡара әле», — ти. Тәүҙә актриса бик тулҡынлана, унан бер аҙ тынысланa төшә. Ҡарап ултырған актерҙар көлә башлай. Шулай уйнап китә. Спектаклде телевидениеға ла төшөрәләр. Театр гастролгә сыҡҡанда: «Теге уҫал киленегеҙҙе алып килмәнегеҙме ни? Үҙен фатирға алып ҡайтайым тигәйнем», — тип килә тамашасылар.

— Минеңсә, характерлы ролде башҡарыуы еңелерәк. Бында бер ниндәй ҡыҫым-тыйыуҙар кәртә була алмай, — ти актриса.

Ул театрға дәрескә йөрөгәндәй йөрөй. Һәр көн ниндәй ҙә булһа яңылыҡ аса, нимәгә булһа ла өйрәнә.

Яҙҙар еткәс, өр-яңынан
Тыуаһым килә минең.
Күңелдәрҙән һағыштарҙы
Ҡыуаһым килә минең.

Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Флүрә Ниғмәтуллинаның йөрәгенән һыҙылып сыҡҡан моң, көсәйә барып, тотош йыһанды биләп ала кеүек. Ә мин был ғәжәйеп моң тулҡынында тирбәлеп, булмышымды биләгән сихри ауаздар аша оло таланттың еңел булмаған яҙмышын байҡайым...